*Ризван ХАЖИЕВ,*
*Башҡорт АССР-ының XII саҡырылыш*
*Юғары Советы халыҡ депутаты, журналист*

# Һәм ул көн килде...

Республикабыҙҙың XII саҡырылыш Юғары Советына 1990 йылдың 4 мартында үткән халыҡ депутаттарын һайлау бынан алдағы һәм унан һуңғы һайлауҙарҙан ҡырҡа айырылып торҙо һәм иң гәҙел, иң демократик һайлау булып тарихҡа инеп ҡаласаҡ.

Ни өсөн тигәндә, беренсенән, йәмғиәтте һәм ижтимағи тормошто тиҫтәләрсә йыл етәкләп, уға «йүнәлеш биреп килеүсе» Коммунистар партияһының көсө, ҡеүәте һәм тәьҫир итеү алымдары бөтөүгә юл тотҡайны. Икенсенән, шул уҡ партия чиновниктары, һарыҡ тиреһе ябынып, йәнә власҡа үрләргә, үҙҙәрен «демократтар» тип иғлан итергә өлгөрмәгәйне әле.

Минең үҙемә лә партия чиновниктарының береһе менән алышырға тура килде. Алға ла сыҡмай, артта ла ҡалмай, һәүетемсә генә урталыҡта юрғалаған район хужаһы — партия райкомының беренсе секретары ине ул. Һайлау алды ярышының тәүге яртыһында был иптәш бәйгегә артыҡ иғтибар итмәй, илтифатһыҙ ғына йөрөнө. Йәнәһе, ул хужа, һәм депутат булып та ул үтәсәк, башҡаса мөмкин дә түгел. Ләкин авторитар режимдан ялҡҡан халыҡ «беренсе»нең ауыҙына артыҡ ҡарап барманы һәм тәүге тур өс кандидатура араһынан минең файҙаға тамамланды. 17 мартта үтәсәк ҡабаттан тауыш биреүгә әҙерлек башланды. Көрәш ҡаты барҙы был осорҙа. «Беренсе»нең ҡулында райондың бөтә партия һәм совет аппараты, колхоз, совхоз һәм предприятиелар етәкселәре, бөтә транспорт, ә миндә ауылдан ауылға йөрөргә хатта арыҡ ат та юҡ. Район артыҡ ҙур булмаһа ла беҙҙең һайлау округында бөтәһе 24 ауыл, һәм улар бөтәһе лә район сигендә ята. Уның ҡарауы — халыҡ минең яҡта, минең менән ихлас һөйләшә, кәңәшләшә. Ҡайһы бер һайлаусылар хатта үҙҙәренең шәхси машинаһы менән бер ауылдан икенсеһенә илтеп тә ҡуя. Әлбиттә, һайлау, сәйәсәттең бер өлөшө булараҡ, «бысраҡ» эш. Ҡулында депутатлыҡҡа кандидат итеп теркәлеү тураһындағы таныҡлыҡ була тороп та, һине теләһә ниндәй милиционер туҡтатып документтарыңды тикшерергә, хатта «иҫерекһең» тип, милицияға алып барып тығырға мөмкин. Хужалыҡ етәкселәренең янауын да, ҡурҡытыуын да, телефон аша «имен сағыңда тай бынан» тигән һүҙҙәрҙе лә ишетергә, йәшәгән ҡунаҡхананың тәҙрәһен ватып киткәндәрен дә күрергә тура килде. Әммә, нисек кенә булмаһын, 17 марттағы ҡабат тауыш биреүҙә һайлаусыларым йәнә мине яҡлап сыҡты.

Апрель баштарында яңы һайланған халыҡ депутаттары, ул саҡта Ижтимағи-сәйәси үҙәк тип аталған Фрунзе һәм Совет урамдары сатын төйәк иткән мөһабәт бинаның киң, иркен залына Юғары Советтың тәүге сессияһына йыйылды. Әммә Конституцияла ҡаралған 280 урынына 267 генә депутат килгәйне. Ҡалғандары йыл дауамында айырым округтар буйынса өҫтәмә һайлауҙар үткәрелгәс залдағы үҙ урындарын алды.

Беренсе сессия ойоштороу эштәре менән генә шөғөлләнде. Юғары Советтың рәйесен, уның урынбаҫарҙарын, даими комиссиялар һәм уларҙың рәйестәрен һайларға кәрәк ине беҙгә. Байтаҡ тартҡылашҡас, өс альтернатив кандидатура араһынан, быға тиклем сәйәси даирәләрҙә исеме аҙ билдәле, КПСС-тың XXII съезы исемендәге Өфө нефть эшкәртеү заводы директоры Мортаза Рәхимовҡа өҫтөнлөк бирелде һәм ул Башҡорт АССР-ы Юғары Советы рәйесе итеп һайланды. Урынбаҫарҙары — Өфө ҡалаһының Киров район Советы башҡарма комитеты рәйесе Юрий Демин һәм партияның Дүртөйлө район

комитетының беренсе секретары Рәзил Мусин.

Республиканың альтернатив юл менән демократик принциптарға таянып һайланған тәүге парламенты төрлө ҡатлам, төрлө ҡарашлы һәм төрлө һөнәр кешеләренән ғибәрәт ине. Улар араһында юристар ҙа, уҡытыусылар ҙа, врачтар ҙа, хатта журналистар ҙа бар. Шовинистар ҙа, милләтселәр ҙә, интернационалистар ҙа, космополиттар ҙа, коммунистар ҙа етерлек. Биш йыл бергә эшләү дәүерендә беҙ бер-беребеҙгә өйрәнеп, ылығып, дуҫлашып, йә дошманлашып та бөттөк. Миңә халыҡ депутаттары (вазифа-маҙарҙарын әйтеп тормайым) Николай Катаев, Зөфәр Еникеев, Дамир Ҡыуатов, Рәҡит Бәширов, Хәбир Мусин, Марат Аҙнабаев, Николай Свободин, Михаил Старцев, Гүзәл Ситдиҡова, Ғилман Сәфәрғәлин, Марат Резбаев, Зиннур Йәрмөхәмәтов, Радил Мөхәмәтдинов, Виктор Резяпов, Марат Мәһәҙиев, Ғәлинур Мөлөковтарҙың фиғел-ҡылыҡтары, тотҡан ныҡлы позициялары, төплө фекерҙәре оҡшай ине. Сессияларҙа ла улар, ҡайһы бер еңел-елпе депутаттар кеүек, боғаҙ йыртмай, аныҡ тәҡдимдәр, кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр менән сығыш яһай торғайнылар. Әллә «артыҡ аҡыллы» булғанға, шуларҙың береһе — Башҡортостан икмәк продукттары производство берекмәһенең генераль директоры Дамир Ҡыуатовты, йәнәһе, «учреждение үҙгәртеп ҡоролдо» тип, 1993 йылда депутатлыҡтан кинәт кенә саҡыртып алдылар. Ләкин уны бит Башҡортостан икмәк продукттары берекмәһе түгел, ә 205-се Иҫәнғол округы һайлаусылары депутатлыҡҡа һайлағайны. Предприятие үҙгәртеп ҡоролған хәлдә лә 1990 йылдың 24 сентябрендә ҡабул ителгән «Башҡорт АССР-ы халыҡ депутаты статусы тураһында»ғы закондың 10 статьяһына тап килмәй был саҡыртып алыу. Тимәк, исеме республикала киң билдәле Дамир Мөҙәрис улы Ҡыуатов кемдеңдер юлына арҡыры төшкән, ә ундайҙарҙы беҙҙә бик өнәп еткермәйҙәр.

Эйе, ер һелкетеп, баҫҡан урындан ут сығарып, тураһын әйтеп һөйләшә белгән ир-егеттәр байтаҡ ине беҙҙең депутаттар корпусында. Әлбиттә, ғаилә ғәрипһеҙ булмай тигәндәй, парламентты туҙға яҙмаған юҡ-бар сығыштары менән албырғатып, төп йүнәлештән ситкә ҡайырырға маташыусылар ҙа осраштырғыланы. «Восток» банкы идараһы рәйесе Рәфис Ҡадыров, «Оло



*Юғары Совет сессияһында*

Тәләк» совхозы директоры Хәсән Иҙиәтуллин, Белорет металлургия комбинатының цех начальнигы урынбаҫары Григорий Корольков сессия һайын трибунанан тороп эшкинмәгән сығыштары менән, йә урындан тоҙһоҙ репликалар ташлап маҙаға тейә торғайнылар. Бөгөнгө бейеклектән ҡарағанда, уларҙың оппозицияла тороуы, парламенттың берҙәм фекеренә ҡаршы сығыуы, дөрөҫмө-дөрөҫ түгелме, үҙ фекерендә, үҙ ҡарашынды яҡлау, бәлки, кәрәк тә булғандыр. Юғиһә, хәҙерге Дәүләт Йыйылышы—Ҡоролтайы тәнҡиткә, анығ тәҡдимдәргә артыҡ ҡолаҡ һалмаусы «тыңлайбыҙ-с», «яҡлайбыҙ-с» тибындағы парламентҡа әйләнеп бара, буғай.

Әммә шуныһы хаҡ: Башҡорт АССР-ының XII саҡырылыш Юғары Советы депутаттарының күбеһе эшсән, әүҙем ине. Сөнки улар үҙ позицияһын, үҙ халҡын яҡлай һәм һаҡлай белде, һәм шулар арҡаһында ғына, тип әйтер инем мин, беҙ республиканың дәүләт суверенитетын алыуға өлгәштек. Яңы Конституция, 165 закон, 13 кодекс ҡабул ителде. Шуларҙың иң мөһимдәре — Ер кодексы, Урман, Экология, Һыу, Ер аҫты байлыҡтары, Торлаҡ, Хеҙмәт, Граждандар һаулығын һаҡлау, Киң информация саралары тураһындағы кодекстар, Башҡортостан Республикаһының флагы, гербы һәм гимны, Мәғариф, Мәҙәниәт, Йәштәр сәйәсәте, Һуғыш, хеҙмәт һәм Ҡоралды Көстәр ветерандары тураһындағы закондар. Ана шул кодекс һәм закондарҙы әҙерләүҙә, ҡабул итеүҙә һәм тормошҡа ашырыуҙа түбәндә атап үтеләсәк халыҡ депутаттары айырыуса тырышлыҡ һалды, уларҙың һәр статьяһын, һәр өтөрөн һәм нөктәһен йөрәге, күңеле аша үткәрҙе.

Мортаза Рәхимов. Буйы ике метрға тартым, баһадир кәүҙәле, ҡарағусҡыл йөҙлө, ҡыҫыҡыраҡ күҙле, битенән йылмайыу ҡатыш хәйләкәрлек сатҡылары өҙөлмәгән был кешене тәүләп күргәс, мин: «Вәт, булғас була бит башҡорттар!» — тип эстән генә һоҡланып та ҡуйғайным. Күгәрсен районының Тәүәкән ауылынан сыҡҡан крәҫтиән малайының республикала ғына түгел, бәлки бөтә ил буйынса иң эре һәм ҡеүәтле Өфө нефть эшкәртеү заводы директоры дәрәжәһенә тиклем күтәрелеүе генә лә үҙе ни тора! Беҙҙең депутаттар араһында ул мөһабәт кәүҙәһе менән генә түгел, ә фекер йөрөтөү ҡеүәһе, аҡыллы кәңәштәре, тәҡдимдәре менән дә айырылып торҙо. Ғәҙәттә ул аҙ һөйләр, күберәк башҡаларҙы тыңлар ине.

Әлбиттә, Мортаза Рәхимов ул йылдарҙа, завод эшселәренә хас, үтә турараҡ та бәрҙерә ине. Тора-бара Рәхимов та сәйәси тормошҡа өйрәнеп, унаң тәмен белеп алды һәм йылдан-йыл сәйәси аң-белеме күтәрелде, атаҡлы дәүләт эшмәкәре, президент булып та китте.

Зөфәр Еникеев. Арабыҙҙа иң йәш депутаттарҙың береһе. Баймаҡ районының Моҡас ауылында тыуып үҫкән был һомғол, йомороҡ кәүҙәле, етди ҡарашлы 39 йәшлек юридик фәндәр кандидаты тәүҙә Юғары Советтың Закондар сығарыу, законлылыҡ һәм хоҡуҡ һаҡлау комиссияһында эшләне. Артабан халыҡ мәғарифы, фән, мәҙәниәт, милләт һәм милләт-ара мәсьәләләр, тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлау комиссияһы рәйесе итеп һайланды һәм беҙ, ошо комиссия ағзалары, яңылышманыҡ. Сөнки был комиссия тарафынан байтаҡ ҡына закон һәм кодекс, шул иҫәптән, Мәғариф, Мәҙәниәт, Фәнни эшмәкәрлек һәм дәүләт фәнни-техник сәйәсәт, Башҡортостан Республикаһының дәүләт флагы, гербы һәм гимны тураһында закондар, Киң информация саралары тураһында кодекс проекттары әҙерләнеп сессияларға сығарылды һәм ҡабул ителде. Һәм бөтә был эштәрҙең башында З. Еникеев торҙо. Әле лә Дәүләт Йыйылышының Закондар сығарыу Палатаһында уңышлы эшләп килә.

Михаил Старцев. Юл төҙөү мастерынан, прораб, төҙөлөш ойошмаһы управляющийы, «Башнефтезаводстрой» акционерҙар йәмғиәте президентына тиклем оҙайлы хеҙмәт юлы үткән Бөрө егете үҙенең оҙон буйлы ҡаҡса кәүҙәһе менән генә түгел, бәлки яңғырауыҡ тауышы, эшлеклелеге, сағыу сығыштары, анығ тәҡдимдәре менән дә иҫтә ҡалған. Бәғзе бер урыҫ депутаттарына хас милли сикләнгәнлек, мин-минлек, шовинизм уға ят һәм дәүләт суверенитеты тураһындағы Декларацияны беренселәрҙән булып яҡлап сығыш яһаны. Үҙенең киҫкен холҡо, тура һүҙе, аҡты аҡ, ҡараны ҡара тип атауы менән ул ҡайһы берҙәргә оҡшап та етмәгәндер, бәлки. Һуңынан уға Салауат районы үҙәге Малаяҙҙа Салауат Юлаев музейының үҙенсәлекле бинаһын проектлау һәм төҙөлөш эштәрен етәкләгән өсөн Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы бирелде.

Гүзәл Ситдиҡова. XII саҡырылыш Юғары Совет депутаттары араһында ҡатын-ҡыҙ затынан 14 кенә кеше бар ине. Шуларҙың береһе — Инйәр һайлау округынан Гүзәл Ситдиҡова. Исеме есеменә тап килгән һәм нурлы күҙҙәренән осҡон сәсрәп торған был журналист-депутат ваҡыты менән инә арыҫланға ла әйләнеп китә торғайны. Тел, милләт, мәҙәниәтте, ауыл халҡын яҡлайым тиһәң, Гүзәлгә ҡуш. Үҙенең яҡташы Григорий Корольковтың милли сикләнгәнлек менән һуғарылған сығыштарынан һуң иң тәүҙә уға ҡаршы Гүзәл Рамазан ҡыҙы трибунаға күтәрелә һәм тегенең тетмәһен тетә башлай, уға ауыҙ асырға ла ирек бирмәй урынына ултырта. Ул бөгөн дә башҡорт парламентының Закондар сығарыу Палатаһында иң әүҙем эшләүсе депутат. Гүзәл кеүек сая, төплө фекерле һәм аҡыллы ҡатын-ҡыҙ депутаттар күберәк булһа икән беҙҙә.

Республиканың XII саҡырылыш Юғары Советына буласаҡ депутаттарҙың һәр береһе тип әйтерлек үҙенең һайлау алды программаһында (ул саҡта уны «платформа» тип тә йөрөттөләр) Башҡортостанға үҙаллылыҡ яулап алырға, Башҡорт АССР-ын Башҡорт ССР-ына әйләндерергә төрлө трибуналарҙан тороп һүҙ биргәйнеләр. Ләкин вәғәҙә — вәғәҙә инде ул, уны үтәргә була, үтәмәҫкә була. Асылда иһә мәсьәлә бик етди булып сыҡты һәм уны нисек тормошҡа ашырырға? Ана шул турала апрелдән октябргәсә төрлө кимәлдә шаулы бәхәстәр барҙы. Уға матбуғат, телевидение, радио, төрлө партиялар, ижтимағи хәрәкәттәр, йәмәғәт ойошмалары ла килеп ҡушылғас, бәхәс тағы ла ҡырҡыуыраҡ, киҫкенерәк төҫ алды. Әгәр «Урал» башҡорт халыҡ үҙәге Башҡортостандың дәүләт суверенитеты тураһындағы Декларация проектына республиканың үҙ Ҡоралллы Көстәрен, эске ғәскәрҙәрен булдырыу тураһында тәҡдим индерһә, Татар ижтимағи үҙәге Башҡортостанды «бүлгеләргә» тотонды. Ошондай ҡатмарлы сәйәси осорҙа йәй әйләнәһенә матбуғатта Декларацияның бер нисә проекты донъя күрҙе, яҡындан танышыу һәм, 20 августан да һуңлатмай, үҙ тәҡдимдәреңде индереү өсөн халыҡ депутаттарына ебәрелде. Уларҙың тәүгеһе Юғары Совет Президиумы, икенсеһе Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы, өсөнсөһө фән кандидаттары Л. Ғүмәрова, З. Еникеев, А. Тихомиров, Д. Йосоповтар тарафынан әҙерләнгәйне. Быларҙан тыш йәнә «Урал» башҡорт халыҡ үҙәге, Юристар союзы, КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты, халыҡ депутаттары Ә. Шакиров, Р. Мағазов, М. Баһауетдинов, профессор Б. Юлдашбаев, РСФСР-ҙың халыҡ депутаты Б. Лысенко һәм башҡалар ҙа үҙ проекттарын тәҡдим итте. Проекттар байтаҡ һәм төрлө-төрлө, ҡайһыһына тотонорға, ҡайһыһын нигеҙ итеп алырға ла белеп булмай. Шулай ҙа төп маҡсат бер — Башҡорт АССР-ы Башҡорт ССР-ына әйләнергә, союздаш республика статусын алырға хаҡлы. Ул беҙгә сәйәси һәм иҡтисади үҙаллылыҡ бирәсәк. Сөнки 1990 йылға тиклем Башҡортостандағы сәнәғәт предприятиеларының 97 проценты үҙәк министрлыҡтарға буйһоноп килде. Республика етештергән 17,5 миллиард һум (ул саҡтағы курс менән) килем дөйөм Союз бюджетына күсерелеп, үҙебеҙҙә барлы-юҡлы 960 миллионы ғына ҡала, ә «Башнефть» системаһындағы предприятиеларҙың һуҡыр бер тине лә республика кеҫәһенә инмәне.

Икенсенән, мәҙәниәт, фән, мәғариф өлкәләрендә лә хәлдәр хөрт. Фәндәр академияһын ғына алайыҡ. СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы, беҙҙән дә һорап тормай, ҡапыл ғына СССР Фәндәр академияһы Урал бүлексәһенең (үҙәге Екатеринбургта) бер киҫәгенә әйләнде. Беҙгә тик үҙебеҙҙең Фәндәр академияһын ойоштороғанда ғына яңы ғилми үҙәктәр, ғилми-тикшеренеү институттары, уҡыу йорттары асыласаҡ, фәнебеҙ, ғилми потенциалыбыҙ Башҡортостанға эшләйәсәк, Генрих Толстиков кеүек «варяг»тарға Башҡортостанды трамплин итеп файҙаланыуға кәртә ҡуйыласаҡ.

Өсөнсөнән, Дәүләт суверенитеты тураһында декларация проекттарын әҙерләгәндә беҙ милли кадрҙар проблемаһын да алға ҡуйғайныҡ. Ул саҡта Башҡортостан халыҡ хужалығының бөтә төр тармаҡтарындағы етәкселәрҙең ни бары 24,2 проценты ғына башҡорт милләтенән ине. Был Карел һәм Коми республикаларынан ҡала арттан өсөнсө урында тигән һүҙ. Шул уҡ ваҡытта төп милләт халҡы араһынан сыҡҡан етәкселәр Әрмәнстанда — 99,4, Литвала — 91,5, Дағстанда — 83,8, Эстонияла — 82,4, Татарстанда — 64,1, Сыуаш АССР-ында 59,2 процент тәшкил ите. Үкенескә ҡаршы, был дискриминация, төп ха-

лыҡтың хоҡуҡтарын ҡыҫыу бөгөн дә дауам итә әле.

Артабан Декларация проектына республиканың үҙаллылығын юридик яҡтан нығытыу, әле йәшәп килгән милли-дәүләт ҡоролошон тамырынан үҙгәртеп ҡороу, Башҡортостандың Рәсәй һәм СССР менән бөтә мәсьәләләрҙе үҙ-ара төҙөлгән Килешеүҙәр нигеҙендә генә алып барыу юлдары ла ҡаралғайны.

Ләкин ҡағыҙҙа шыма булһа ла, соҡорсаҡырҙарҙы онотоп ебәргәнбеҙ икән, һәм эш беҙ теләгәнсә генә барманы. Үҙ-ара ығы-зығы, тауыш, тартыш китте. Ҡайһы бер «аҡыллы баштар» хатта шундай сиккә барып етте: «Нимәгә ул беҙгә автономия, Башҡортостанды өлкәләргә бүлергә лә, шуның менән вәссәләм». «Союздаш республика булыуҙан ни файҙа?»

Беҙ үҙ-ара сәкәләшкән арала ут күршебеҙ Татарстан тауыш-тынһыҙ ғына 1990 йылдың 30 авгусында үҙенең дәүләт суверенитетын иғлан итте лә ҡуйҙы. Был хәл беҙгә ышаныс, өмөт өҫтәне. Тимәк, хәҙер Мәскәү ағайҙарынан шөрләйһе, баш эйәһе юҡ, тимәк, кемдән үрнәк алырға беләбеҙ. Шулай ҙа эсте ниндәйҙер ҡара бесәй — көнсөллөк тойғоһо тырнай. Нисек инде ул — әле 1917 йылда уҡ Башҡортостан йәш Совет республикаһында беренсе булып милли-азатлыҡ хәрәкәте тыуын күтәреп сыҡты һәм 1919 йылдың мартында Үҙәк менән килешеү нигеҙендә автономия алыуға өлгәште. Хәҙер килеп иһә беҙ артта ҡалдыҡ. Ни өсөн һәм кем ғәйепле быға? Һәр депутатты ошо тынғыһыҙ һорау борсоно. Ләкин был көнсөллөк ҡара, эскерле көнсөллөк түгел, ә, урыҫ әйтмешләй, аҡ көнсөллөк тойғоһо ине, һәм беҙ низағтарҙы ситкә ташлап, Декларация проектын еренә еткереү өсөн ең һыҙғанып эшкә тотондоҡ.

... Һәм ул оҙаҡ көткән, бөтә республика халҡы оло өмөт бағлаған көн таңы атты.

Һалҡынса ғына тын октябрь иртәһе. Ижтимағи-сәйәси үҙәк бинаһына ҡаршы Ленин баҡсаһындағы саған, йүкә ағастары һары яулыҡ ябынған. Улар араһындағы аҡлан һәм асфальт һуҡмаҡтар, шулай уҡ бина алды ҡулдарына «Башҡортостанға — тулы суверенитет!», «Башкирскому языку — государственную защиту!», «Башҡорт һәм рус телдәренә — дәүләт статусы!» һәм башҡа төр плакат, транспаранттар тотҡан халыҡ менән шығырым тулы. Ара-тирә баштарына осло төлкө бүрек, өҫтәренә милли елән кейгән башҡорт егеттәре һыбай сабып үтә, арыраҡ ике яҡ юлды ла автобустар, еңел машиналар ҡаплаған. Республиканың төрлө төбәктәренән килгән делегациялар ине ул. Бигерәк тә Баймаҡ, Ишембай, Күмертау, Мәләүез райондарынан халыҡ күп.

Баҫҡыс төбөндә торған милиционерҙарға депутат мандаттарын күрһәтеп, пикетсылар төркөмөн көс-хәл менән йырып, эскә үтәбеҙ. Арттан: «Суверенитет!», «Азатлыҡ!», «Бойондороҡһоҙлоҡ!» тигән тауыштар оҙатып ҡала. Хаттар кемдер: «Декларацияны ҡабул итмәһәгеҙ, залдан сығармайбыҙ!» — тип шаярыулы-ысынлы һүҙ ҙә ташларға өлгөрҙө.

Сессия башлана. Уның көн тәртибенә туғыҙ мәсьәлә ҡуйылғайны. Шуларҙың иң тәүгеһе — «Башҡорт Совет Социалистик Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында декларация». Сәхнәләге Президиумда Мортаза Рәхимов менән уның урынбаҫары Юрий Демин ғына. Сессияны асып көн тәртибен ҡабул иткәс, М. F. Рәхимов Декларация проектын әҙерләү редакцияһы комиссияһы рәйесе Ю. С. Деминға һүҙ бирә. Ул проект менән таныштырып бөтөрбөтмәҫтән әле бер, әле икенсе депутат трибунаға атлыға, рәт араларындағы микрофондар артына сират теҙелә. Декларацияның һәр һүҙе, һәр һөйләме энәһенән-ебенә тиклем тәфсилләп тикшерелә, яңынан-яңы өҫтәмәләр, төҙәтмәләр индерелә. Берәүҙәр дәүләт суверенитетына бөтөнләй арты менән боролһа, икенселәр уны бөтә халыҡ референдумына сығарып ҡабул итеүҙе ҡайыра, өсөнсөләр иһә союздаш республика хоҡуғын алғас Рәсәй Федерацияһы менән буласаҡ мөнәсәбәттәрҙе асыҡлауҙы талап итә. Проектты әҙерләгән эшсе төркөмө етәксеһе, Юғары Советтың Закондар сығарыу һәм хоҡуҡ һаҡлау мәсьәләләре буйынса бүлек мөдире Винер Сәмиғуллин һорауҙарға яуап бирә-бирә хәлдән тайҙы, йөҙөнә бөрсөкбөрсөк тир тамсылары сыҡты. Ләкин ул бирешергә теләмәй — һәр һорауға аныҡ, тос һәм тапҡыр яуап бирә, һөмһөҙ ҡыланған ҡайһы бер депутаттарҙы «төҙәтеп» тә ебәрә.

Бәхәстәрҙең иң ҡыҙған мәлендә трибунаға Татарстан Яҙыусылар союзы рәйесе, РСФСР-ҙың халыҡ депутаты Ринат Мөхәмәҙиев күтәрелә:

— Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле дуҫтар! — тип, бөтәбеҙҙе лә ғәжәпкә ҡалдырып, саф башҡорт телендә башлай ул телмәрен. Ә

беҙ, һантыйҙар, Башҡортостан, башҡорт халҡы, башҡорт теле тураһында ярты көн буйы тел сарлаһаҡ та, беребеҙ-бер ошо телдә сығыш яһарға уйлап та ҡараманыҡ.

Артабан Ринат:

— Бөгөнгө сессияла башҡортса яңғыраған был тәүге һүҙҙәр, — тип башҡорт депутаттарына «төрттөрөп» тә алды һәм һүҙен русса дауам итте. Шуға ла уның сығышынан ҡайһы бер өҙөктәрҙе ул нисек һөйләгән, шул килеш килтермәксемен:

— Тут некоторые поднимают вопрос вынести Декларацию на всенародный референдум. Мне кажется, что это безнравственно и аморально. А вдруг референдум пройдет и лишит башкирский народ его прав? Это будет преступлением века. Нельзя ее вынести на референдум. Вот один абзац из Декларации: «реализуя неотъемлемое право башкирской нации, всех народов республики на самоопределение...» Если я был бы русским, тут «русского народа» хотелось бы услышать. Мне, как татарину, хочется услышать и название своего народа, чувашу — своего, марийцу — своего. Но, товарищи, поймите меня правильно, на земном шаре нет другого государственного национально-территориального образования, где мог бы башкирский народ реализовать свое волеизъявление. Это — единственная территория.

Еще один щепетильный вопрос, которого я, как народный депутат РСФСР, не должен касаться, но как гражданин, хочу об этом сказать. Очень много говорят о выходе из состава России. Товарищи башкиры, татары, мы можем выходить из России только в двух направлениях: или в небо, или в землю. Другого выхода нет!»

Ошо тарихи сессиянан тиҫтә йыл ваҡыт үтһә лә, Ринат Мөхәмәҙиевтың һүҙҙәре бөгөн дә ҡолаҡ төбөндә сыңлап тора һымаҡ. Әлбиттә, бының менән мин Башҡортостанға суверенитет яулауҙа нәҡ Ринат Мөхәмәҙиев ярҙам итте, этәргес көс булды, тип әйтергә йыйынмайым. Тик шуға иманым камил: Татарстандан килгән ҡәләмдәшебеҙ сығышанан һуң бәхәстәр, шаушыу бер аҙ баҫыла төштө һәм беҙ проектҡа индерелгән өҫтәмәләрҙе һәм төҙәтмәләрҙе тағы ла бер ҡат ҡарап сығырға тип, комиссияларға таралыштыҡ.

Икенсе көндә лә, йәғни 11 октябрҙә, пикетсылар һаны кәмемәгәйне, киреһенсә, халыҡ төркөмө һаман ҡуйыра, тығыҙлана төшкән. Был юлы пикетсылар сессия залындағы һөйләшеүҙе урамға ретрансляциялауҙы талап иттеләр һәм уларҙың үтенсе ҡәнәғәтләндерелде.

Һәм бына Юрий Демин ҡулына әҙер Декларация тексын тотоп йәнә трибунаға сыға. Бер аҙ ҡарлыҡҡан, нимә менәндер ризалашмаған тоноҡ тауыш менән Декларацияны уҡый башлай.

«Эх, Старцевҡа ғына уҡырға ҡушһалар икән, — тип уйлайым эстән генә. — Күтәренке рух менән залды, урамды, республиканы яңғыратып уҡып бирер ине. Бындай көн ай, йыл һайын ҡабатланмай бит!»

Проект тексы уҡылып бөткәс тә тәҡдимдәр, өҫтәмәләр индереү туҡталмай, һәр пункт асыҡ тауыш биреү юлы менән ныҕытылып бара, йәғни депутаттарға мандаттарын ун тапҡыр күтәрергә тура килде. Ләкин был ғына аҙ. Халыҡтың һорауын кире ҡаҡмай, исемләп тә тауыш бирергә кәрәк. Уның һөҙөмтәләре былайыраҡ килеп сыҡты: сессияла ҡатнашҡан 256 депутаттан бер генә кеше – «БАЛ» авиакомпанияһының осоу хеҙмәте етәксеһе Иван Андреев — беҙҙең суверенитетҡа ҡаршы тауыш бирҙе. Өфө ҡалаһынан депутат булып үткән Владимир Аликин, Борис Целищев, Раиса Жукова, Белореттан Григорий Корольков битараф ҡалды, ә шул уҡ Өфөнән Ринат Артемьев, Анатолий Барсуков, Риза Мағазов, Александр Шибин, Салауат ҡалаһынан Анатолий Кузнецов һәм Бөрөнән Валериан Хужин тауыш биреүҙән бөтөнләй баш тартты, ә был шул уҡ ҡаршы сығыуҙы, республика яҙмышына вайымһыҙлыҡты аңлата түгелме ни? Бынан ун йыл элек Башҡортостандың бойондороҡһоҙлоғона кемдәрҙең ҡаршы сығыуын халыҡ белһен һәм үҙенсә һығымта яһаһын, фәһем алһын тигән уй менән килтерелде был исемдәр.

Ниһайәт, иҫәп комиссияһы Башҡортостан Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында декларацияның ҡабул ителеүе хаҡында хәбәр итә һәм беҙ аяғүрә баҫып, сессия залының түшәмен емерерҙәй итеп ҡул сабабыҙ, бер-беребеҙҙе ҡосаҡлайбыҙ, ҡысҡырабыҙ, ҡыуанабыҙ. Күҙҙәрҙән ирекһеҙҙән йәштәр атылып сыға, ләкин уны бер кем дә һөртмәй. Сөнки шатлыҡ, кинәнес, тыуыр таңдарға, килер көндәргә оло ышаныс, өмөт күҙ йәштәре ине улар...